# «Дуҫлыҡ байрамы» кластан тыш сара

1. Бөгөн беҙҙә ҙур байрам – дуҫлыҡ байрамы. Ул   халҡыбыҙҙың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына арнала.

2. Рәсәй менән Башҡортостан -
Мәңге татыу, мәңге дуҫ.
Пар аҡҡоштар айырылмағандай
Улар ҙа бит һәр саҡ ҡуш.

3. 450 йыл инде
Бергә тибә ҡуш йөрәк,
Ошо ғәзиз дуҫлыҡтан
Беҙгә тағы ни кәрәк?

4. Башҡортостан  һәм Рәсәй
450 йыл бергә.
Ошо матур ваҡиғаны
ҡаршылайбыҙ беҙ бергә.

5.Башҡортостан – башҡорт иле,
Шунда беҙҙең тамырҙар.
Беҙҙең ҡайнар ҡаныбыҙҙа
Сал тарихтың даны бар.

6.Башҡортостан – башҡорт иле,
Торна булып сыңрар ил,
Сор ҡурайҡай һыҙҙырғанды
Ғаләм өнһөҙ тыңлар гел.

Йыр «Ватан»
(ҡурай тауышы аҫтында әкиәтә һөйләү)

7.Борон-борон заманда,
Урманда ла яланда,
Гөл-сәскәле аҡланда
Йәшәгән,ти,шат халыҡ.

8.Һунар иткән,балыҡ тотҡан,

Көтөү-көтөү йылҡы көткән,
Бейә һауып ҡымыҙ бешкән,
Йүкә һуйып арҡан ишкән,
Йөрөшкәндәр ҡунаҡҡа
Яҡынға һәм йыраҡҡа.
Барлыҡ ырыу дуҫ йәшәгән,
үҙ ерен яҡлағандар,
Мөхитте һаҡлағандар.

9.Ләкин яуыз хандар килеп
Яһаҡ даулай башлағандар,
Көтөүлеген киткән тапап,
Урман ҡырҡып ташланған.

Һылыу ҡыҙҙарҙы урлаған,
Өлкәндәрен - хурлаған,
Еребеҙҙе алмаҡ булып
Аждаһалай дулаған.

10. Аҡһаҡалдар йыйылышып
Кәңәш- төңөш иткәндәр,
Дүрт ырыуҙың аҫылдары
Аҡ батшаға киткәндәр.

11.Илебеҙҙең бейҙәре
Күп бүләктәр алғандар,
Аҡ батшаға барғандар,
Бергә-бергә йәшәрбеҙ,тип
Унан вәғәҙә алғандар.

12.Халҡығыҙға һүҙ бирәм,
Ерегеҙгә һис теймәм,
Иркен көн күрерһегеҙ,
Тик яһаҡ бирерһегеҙ – тигән аҡ батша.

13.Беҙ ҙә бурыслы ҡалмабыҙ,
Һаҡлашырбыҙ ил сиген,
Халҡыбыҙ бәхетле булһын,
Тыныс булһын ер-күгем – тип яуаплаған
бейҙәр.

14.Дүрт быуат аша элек,
Урыҫ менән дуҫлашып,
Яуҙа,данда һәр саҡ бергә
Һүҙ төйнәшеп,һөйләшеп,
Француҙын да еңгәндәр.
Немецты ла үҙ өңөндә
Тонсоҡтороп күмгәндәр…

15.Минең халҡым дуҫлыҡ өсөн
Йәлләмәҫ көсөн-тирен,
Йәнен бирер күрше-күлән
Йәшәһен өсөн имен.

16.Ерен биргән,һыуын бүлгән
Күптәргә ауыр саҡта,
Улар өсөн шәфәҡ уты
Һүнмәй янған усаҡта.

17. Быуаттарҙы быуаттарға ялғап
Иңдәрҙе иңгә терәп,
Урыҫ,башҡорт бергә атлай,
Бер-беренә ҙур терәк.

18.Күпме һынауҙарҙы үтте бергә
Урыҫ менән башҡортом.
Киләсәккә илтә улар
Дуҫлыҡтың ялҡын утын.

19.Башҡортостанда төрлө милләт халыҡтары дуҫ йәшәй. Беҙҙең мәктәптә генә 12 төрлө милләт балалары белем ала.

20.Кемдәр йәшәй беҙҙә?

21.Һорауға яуап бирәм.
Сөнки халҡымдың кемлеген
Мин беләм,яҡшы беләм.

22.Башҡорт йәшәй.

23.Татар йәшәй.

24.Сыуаш…

25.Урыҫ…

26.Уйҙары яҡты донъяға –
Килтереү бары ырыҫ.

Йыр «Шире круг»

27.Исемдәр төрлө булһа ла,
Барыбыҙ ҙа бер туған.
Илебеҙҙе йәшәртергә,
Һөйөп-наҙлап йәшәтергә
Беҙ бит донъяға тыуған.

28.Туған тел төрлө булһа ла,
Уртаҡ тыуған илебеҙ,
ҡояшлы Башҡортостанда
Бәхетле һәр беребеҙ.

29.Ата-бабаның
Ихлас дуҫлығын
Саң-кер ҡундырмай
Һаҡлай йәш быуын.

30.Донъяла дуҫлыҡ
Нығынһын һаман.
Ошо дуҫлыҡтан
Нурланһын заман.

31.Дуҫлыҡ ебе өҙөлмәһен,
Быуындарҙы бәйләһен.
Барса халыҡ килешеп,
Татыулыҡта йәшәһен,
ҡайғы-хәсрәт күрмәһен,
Күҙ йәше түгелмәһен…

Йыр «Наш край»

32.Башҡортостан – дуҫлыҡ йорто,

Берҙәмлектә уның ҡото.
Бергә-бергә булһаҡ ҡына,
Бәхет ҡошон булыр тотоп.

33.Бер туғандай яуҙарҙа ла,
Бер туғандай һабанда ла,
Бер туғандай табында ла
Булһаҡ ҡына, нығыр дуҫлыҡ,
үтә алмаҫ аслыҡ,хаслыҡ.

34.Башҡортостан – дуҫлыҡ йорто,
Татыулыҡта уның ҡото,
Туғанлыҡта - уның нуры,
Тоғролоҡта – уның уты.

35.Мәңге йәшә, дуҫлыҡ иле!

36.Мәңге йәшә, Башҡорт иле!

Йыр «Башҡортостан – Гөлбостан»